Муниципальное автономное учреждение дополнительного образования
«Информационно-методический центр»
городского округа город Стерлитамак Республики Башкортостан

СОГЛАСОВАНО
Директор МАУДО «ИМЦ»
ГО г.Стерлитамак РБ
__________Берлизова Р.Я
«_____»__________2017г.

УТВЕРЖДЕНО
На заседании ГЭС
Протокол №
от__________2017г

# ПРОГРАММА ЗАНЯТИЙ
# ГОРОДСКОЙ ШКОЛЫ «ОЛИМПИОНИК»
# ПО ПРЕДМЕТУ «БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА»
**для учащихся 9-11 классов**
**на 2017-2018 учебный год**

Составитель:
Сафарова Расима
Халиловна
Учитель башкирского языка
и литературы
Высшей категории
МАОУ «Гимназия №3
имени Джалиля Киекбаева»
Г.Стерлитамак

СТЕРЛИТАМАК 2017 г.

## Аңлатма яҙыу

Хәҙерге көндә уҡыусыларҙы тексты комплекслы анализларға өйрәтеү белем биреү системаһында төп талаптарҙың береһе булып тора. Сөнки бөгөнгө уҡыусы телмәр маһирлығына, һүҙ ҡеүәһенә эйә булырға тейеш. Үҙ фекерендә бәйләнешле төҙөп, отошло тел саралары ярҙамында маҡсатҡа, йөкмәткегә, аралашыу мөхитенә ярашлы әйтеү йәки яҙа белеү айырыуса әһәмиәтле.

Сығарылыш кластарында белемде тикшереүҙең яңы формаһы – берҙәм дәүләт имтиханы индерелде. Унда ла әҙәби текстка дөйөм анализ ҡаралған.

Шуға күрә лә тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә әҙәби текска дөйөм анализдың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Төрлө теоретик төшөнсәләр, проблемалы һорауҙар, мауыҡтырғыс эш төрҙәре уҡыусыларҙың әҙәби әҫәргә ҡарата ҡыҙыҡһыныуын арттырасаҡ.

Художестволы тексты төрлө яҡлап анализлау уҡыусының телмәрен байыта, логик фекерләү һәләтен үҫтерә, тел үҙенсәлектәрен нескә тойомларға булышлыҡ итә, ғилми-тикшеренеү эшенә ҡыҙыҡһыныу уята.

Курстың программаһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте материалдары нигеҙендә төҙөлдө, ул дәреслектәрҙең йөкмәткеһен киңәйтә һәм тулыландыра, тел һәм әҙәбиәт буйынса белемдәрҙе тәрәнәйтеүгә булышлыҡ итә.

**Курстың маҡсаты:**

художестволы тексты уның төп берәмектәре һәм категориялары нигеҙендә интерпретацияларға өйрәтеү.

**Курстың бурыстары:**

- художестволы текстың төп үҙенсәлектәрен билдәләргә өйрәтеү;
- һүрәтләү сараларының, стилистик фигураларҙың мөмкинлектәрен күрһәтеү;
- художестволы текстың сюжет, композиция үҙенсәлектәрен өйрәнеү;
- герой, лирик герой, хикәйәләүсе төшөнсәләренең әҙәби текстағы урынын билдәләү;
- интертекстуаль элементтар тураһында төшөнсә алыу;
- автор позицияһын белдереүсе алымдарҙы асыҡлау;
- филологик анализдың төрлө алымдары менән танышыу;
- уҡыусыларҙың уйлау һәләтен, хәтерен, телмәрен үҫтереү.

**Уҡыусылар эшмәкәрлеген ойоштороу алымдары**: фронталь, индивидуаль, төркөмләп эшләү.

**Дәрес формалары**: лекциялар, семинарҙар, практикумдар, зачеттар.

Курстың һәр темаһы бурыс ҡуйыуҙан башлана. Теоретик материал лекция формаһында аңлатыла, теорияны өйрәнгәндән һуң нығытыу өсөн практик эштәр башҡарыла.

Дәрестәр уҡыусыларҙың индивидуаль үҙенсәлектәренән, ҡабул итеү темпынан һәм материалды аңлау кимәленән сығып ойоштороla.

**Үҙләштерелгән белемде тикшереү формалары:** үҙ аллы эштәр, ижади эштәр.

**Курстың практик әһәмиәте:** текст өҫтөндә эшләгәндә уҡыусылар һүҙҙе дөрөҫ ҡулланырға, үҙҙәренең фекерен, хәл-торошон телмәрҙе бай, күркәм итеүсе төрлө саралар, стилистик алымдар ярҙамында белдерергә өйрәнәләр. Шулай уҡ был курс уҡыусыларҙы үҙ аллы танып белеү эшмәкәрлегенә өйрәтә.

**Курс барышында уҡыусы** художестволы тексты үҙ аллы комплекслы анализларға **өйрәнергә тейеш.**

**Курсты үткәндән һуң уҡыусы:**

– текст теорияһына ҡағылышлы терминдарҙы;
– филологик анализдың төрлө алымдарын;
– әҫәрҙе идея-эстетик яҡтан ҡабул итә һәм баһалай **белергә тейеш.**

**Ҡулланылған педагогик технологиялар:**

1. *Проблемалы уҡытыу технологияһы* (уҡыу барышында баланы һәр ваҡыт эҙләнеүсе роленә ҡуйыу. Фәнни дөрөҫлөктө ул үҙе асҡан кеүек хис итә. Белемгә уҡыусы үҙенең көсө, үҙенең эҙләнеүе аша эйә булырға тейеш. Фәнде ул ятламаһын, ә үҙе эҙләп тапһын).
2. *Индивидуаль уҡытыу технологияһы* (уҡытыусының һәр уҡыусы менән индивидуаль эш алып барыуы).
3. *Коллектив уҡытыу технологияһы* (уҡыусыларҙың дәрестә 2-3 кешенән торған төркөмдәргә бүленеп эшләүен ойоштороу).
4. *Аҡыл-аң эшмәкәрлеген эҙмә-эҙлекле формалаштырыу технологияһы* (яңы теманы ҡабул итеү бер нисә этап аша бойомға ашырыла).
5. *Үҫтереүсе уҡытыу технологияһы* (уҡыусы тыңлаусы ғына түгел, фекерләүсе, эҙләнеүсе, белем алыусы ла. Ул дәрестә уҡытыусы менән тиң ҡатнашырға һәм эшләргә тейеш).

Курстың йөкмәткеһе

| № | Темалар | Сәғәттәр һаны | Уҡыусылар эшмәкәрлеге төрҙәре | Дата | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | план буйынса | үткәрелгән |
| 1. | Уҡытыу дисциплинаһы булараҡ «Художестволы текстҡа филологик анализ», уның әһәмиәте | 1 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр | 06.10 | |
| 2. | «Текст» һәм «художестволы текст» төшөнсәләре | 1 | Фекер алышалар, һорауҙар бирәләр | 06.10 | |
| 3-4. | Лирик текстҡа анализ үҙенсәлектәре | 2 | Тыңлайҙар, бирелгән эштәрҙе үтәйҙәр, һығымта яһайҙар | 13.10<br>13.10 | |
| 5-6. | Эпик текстҡа анализ үҙенсәлектәре | 2 | Тыңлайҙар, анализлайҙар, һығымта яһайҙар | 20.10<br>20.10 | |
| 7-8. | Драматик текстҡа анализ үҙенсәлектәре | 2 | Тыңлайҙар, бирелгән эштәрҙе үтәйҙәр, һорауҙар бирәләр | 27.10<br>27.10 | |
| 9. | «Жанр» төшөнсәһе. Жанр һәм жанр формаһы | 1 | Фекер алышалар, һорауҙар бирәләр, нығыталар | 03.11 | |
| 10. | Әҫәрҙең темаһы һәм идеяһы | 1 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, анализлайҙар | 03.11 | |
| 11-12. | Эпик һәм драматик әҫәрҙәрҙә сюжет һәм фабула | 2 | Тыңлайҙар, төркөмдәргә бүленеп эшләйҙәр, нығыталар | 10.11<br>10.11 | |
| 13. | Сюжеттан тыш элементтар | 1 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, анализлайҙар | 17.11 | |
| 14. | Эпик текста | 1 | Тыңлайҙар, | 17.11 | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | хикәйәләү структураһы | | һорауҙар бирәләр, һығымта сығаралар | | |
| 15. | Эпик әҫәрҙең сюжетын анализлау. Практикум | 1 | Анализлайҙар, һығымта яһайҙар | 24.11 | |
| 16. | Үҙ аллы эш. Эпик әҫәрҙәрҙең сюжетын анализлау | 1 | Үҙ аллы анализлайҙар | 24.11 | |
| 17. | Драматик текста ремаркаларҙың роле | 1 | Тыңлайҙар, үҙ фекерҙәре менән бүлешәләр | 01.12<br>01.12 | |
| 18-19. | Әҫәрҙә ваҡыт һәм арауыҡ төшөнсәһе. Хронотоп | 2 | Фекер алышалар, төркөмдәрҙә эшләйҙәр, нығыталар | 08.12<br>08.12 | |
| 20. | Әҫәргә хронотопик анализ. Практикум | 1 | Анализлайҙар, һығымта яһайҙар | 15.12 | |
| 21. | Үҙ аллы эш. Әҫәргә хронотопик анализ | 1 | Үҙ аллы анализлайҙар | 15.12 | |
| 22. | Эпик текстың композицияһы | 1 | Анализлайҙар, һорауҙарға яуап бирәләр, бирелгән эштәрҙе үтәйҙәр | 22.12 | |
| 23. | Лирик текстың композицияһы | 1 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, анализлайҙар | 22.12 | |
| 24. | Драматик текстың композицияһы | 1 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, бирелгән эштәрҙе үтәйҙәр | 29.12 | |
| 25. | Художестволы текстың композицияһына анализ. Практикум | 1 | Анализлайҙар, һығымта яһайҙар | 29.12 | |
| 26. | Үҙ аллы эш. Художестволы текстың композицияһына анализ | 1 | Үҙ аллы анализлайҙар | 05.01 | |
| 27. | Образдар системаһы. Лирик герой | 1 | Фекер алышалар, | 05.01 | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | төшөнсәһе | | төркөмдәрҙә эшләйҙәр | | |
| 28. | Художестволы текста автор позицияһын белдереүсе алымдар | 1 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр | 12.01 | |
| 29. | Әҫәрҙең атамаһы | 1 | Фекер алышалар, һорауҙар бирәләр, һығымта сығаралар | 12.01 | |
| 30. | «Күсмә сюжет» төшөнсәһе | 1 | Тыңлайҙар, фекер алышалар | 19.01 | |
| 31-32. | Художестволы текста интертекстуаль элементтар | 2 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, нығыталар | 26.01<br>26.01 | |
| 33. | Художестволы текста фонетик ҡатламды өйрәнеү. Өн, төҫ, мәғәнә бәйләнеше | 1 | Анализлайҙар, төркөмдәрҙә эшләйҙәр | 19.01 | |
| 34. | Текстка фонетик анализ. Практикум | 1 | Анализлайҙар, һығымта яһайҙар | 02.02 | |
| 35. | Үҙ аллы эш: текстка фонетик анализ | 1 | Үҙ аллы анализлайҙар | 02.02 | |
| 36-37. | Художестволы текстың лексикаһы. Килеп сығышы һәм ҡулланылышы яғынан һүҙлек байлығы | 2 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, төркөмдәрҙә эшләйҙәр | 09.02<br>09.02 | |
| 38-39. | Кинәйәләү алымдары (метафора, метонимия, сағыштырыу, аллегория, символ, гипербола, литота һ.б.) | 2 | Тыңлайҙар, бирелгән эштәрҙе үтәйҙәр, һорауҙарға яуап бирәләр | 16.02<br>16.02 | |
| 40-41. | Стилистик фигуралар | 2 | Тыңлайҙар, бирелгән эштәрҙе үтәйҙәр, һорауҙарға яуап бирәләр | 02.03<br>02.03 | |
| 42-43. | Текста мәҡәлдәр, әйтемдәр, афоризмдар, фразеологизмдарҙың ҡулланылышы | 2 | Төркөмдәрҙә эшләйҙәр, бирелгән эштәрҙе үтәйҙәр | 09.03<br>09.03 | |
| 44. | Художестволы текстка лексик-семантик | 1 | Анализлайҙар, һығымта | 16.03 | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | анализ. Практикум | | яһайҙар | | |
| 45. | Үҙ аллы эш. Текстҡа лексик-семантик анализ | 1 | Үҙ аллы анализлайҙар | 16.03 | |
| 46. | Художестволы текстың ритмы | 1 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, нығыталар | 23.03 | |
| 47. | Һөйләмдәрҙең интонацияһы | 1 | Һорауҙар бирәләр, нығыталар | 23.03 | |
| 48. | Лирик текста метрика һәм ритмика | 1 | Тыңлайҙар, анализлайҙар, нығыталар, тикшерәләр | 30.03 | |
| 49. | Художестовлы текстҡа ритмик-интонацион анализ. Практикум | 1 | Анализлайҙар, тикшерәләр, һығымта яһайҙар | 30.03 | |
| 50. | Үҙ аллы эш. Текстҡа ритмик-интонацион анализ | 1 | Үҙ аллы анализлайҙар | 06.04 | |
| 51-52. | Һүҙьяһалыш сараларының һүрәтләү мөмкинлектәре | 2 | Тыңлайҙар, бирелгән эштәрҙе үтәйҙәр | 06.04<br>13.04 | |
| 53-54. | Морфологик формаларҙың һүрәтләү мөмкинлектәре | 2 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, нығыталар | 13.04<br>20.04 | |
| 55-56. | Текстың синтаксисы һәм пунктуацияһы | 2 | Тыңлайҙар, һорауҙар бирәләр, бирелгән эштәрҙе үтәйҙәр | 20.04 | |
| 57. | Лингвостилистик анализ. Практикум | 1 | Анализлайҙар, һығымта сығаралар | 27.04 | |
| 58. | Үҙ аллы эш. Текстҡа лингвостилистик анализ. | 1 | Үҙ аллы анализлайҙар | 27.04 | |
| 59. | М.Кәримдең «Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа» шиғырына анализ | 1 | Анализлайҙар, фекер алышалар, һығымта яһайҙар | 04.05 | |
| 60. | Р.Ғариповтың «Урал йөрәге» әҫәренә анализ | | Анализлайҙар, төркөмдәрҙә эшләйҙәр | 04.05 | |
| 61. | З.Биишеваның «Һөнәрсе менән | 1 | Анализлайҙар, фекер | 04.05 | |

## Ҡулланылған әҙәбиәт


1. Болотова Н.С. Филологический анализ текста. – Томск, 2011.-Ч.1.
2. Гальперин И.Р. Текст как объект лингвистического исследования. – М., 2013.
3. Долинин К.А. Интерпретация текста. – М., 2010.
4. Журавлёв А.П. Звук и смысл. – М., 2011.
5. Кирәева Л.Р. Художестволы текстҡа филологик анализ. – Стәрлетамаҡ, 2015.
6. Лотман Ю.М. Анализ поэтического текста. – Л., 2010.
7. Лукин В.А. Художественный текст: основы лингвистической теории и элементы анализа. – М., 2012.
8. Николина Н.А. Филологический анализ текста: Учеб. пособие для студ. высш. пед. учеб. заведений. – М., «Академия», 2013.
9. Новиков Л.А. Художественный текст и его анализ. – М., 2012.
10. Шанский Н.Н. Художественный текст под лингвистическим микроскопом. – М., 2010.
11. Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө, 2013.

# График работы школы «Олимпионик»

| ФИО (полностью) руководителя | Предмет | Класс | ОУ | День недели | время | Номер кабинета |
|---|---|---|---|---|---|---|
| Сафарова Расима Халиловна | Башкирский язык и литература | 10-11 | МАОУ «Гимназия №3 имени Джалиля Киекбаева» | пятница | 15.00-16.45 | 41 |